**Якташ үҙешмәкәр шағирҙар менән осрашыу кисәһе сценарийы**

***Курай моңо аҫтында шиғыр һөйләү***

**Мин шағир ҙа, яҙыусы ла түгел,**
**Ә яратам шиғыр яҙырға.**
**Дуҫтар, туғандарым өсөн,**
**Һатыр өсөн түгел баҙарҙа.**

**Шиғыр юлдарына һалам**
**Күңелемә килгән һүҙҙәрҙе.**
**Кешеләрҙең һөйләгәнен тыңлап,**
**Үҙ күҙҙәрем менән күргәнде.**

**Шиғырҙарҙың төрлөләрен яҙам,**
**Байрамдарға, тыуған көндәргә.**
**Ислам дине тураһында яҙам,**
**Тыныслыҡтар теләп илдәргә.**

**1**.Шиғриәт донъяһы ниндәй? Белмәй бер кем,
Ул үҙенә йыйған бөтә йәшәү күркен.
Инеп батһаң ошо даръя ағышына,
Үлгәндә лә үкенмәҫһең яҙмышыңа.

**2**. Һәр нәмәлә шиғыр ята,
Әгәр күрә, тоя белһәң,
Тойғаныңды йөрәгеңдә
Шиғыр итеп ҡоя белһәң.

**1**.-Хәйерле көн, ҡәҙерле тамашасылар! Һаумыһығыҙ, һүҙ ҡәҙерен белеүселәр, хәйерле көн һеҙгә, һүҙҙең бәҫен арттырыусылар! Бөгөн беҙҙә күркәм кисә. Халҡыбыҙҙың рухын күтәреп, йәшәүгә дәрт, илһам уятыусы ижад әһелдәренең Мөхәмәтша Буранғолов исемендәге башҡорт лицейы уҡыусылары менән осрашыу кисәһе.

**2**.-Бөгөнгө кисәлә ҡатнашыусы ялҡынлы ижад юлын мәңгелек дуҫ-иптәш итеп һанаған хөрмәтле һүҙ оҫталары, **Якташ үҙешмәкәр ҡәләм тибрәтеүселәр** менән танышып үтәйек:

1. Салауат Көҫәпҡолов
2. Гөлфиә Гизатова
3. Ильфак Фарызов
4. Вәсимә Аманғолова
5. Гөлнур Гиззатуллина

**1**.Ҡунаҡтарҙы сәләмләү өсөн һүҙ мәктәп директоры Алик Тимерғәзим улына бирелә!

**2**.Һүҙ яҡташ шағирҙар ижадына арналған шиғыр һөйләүселәр бәйгеһендә еңеүсе уҡыусыларға.

**1 төркөм шиғырҙар һөйләй (Сәләмләйем)**

**1.“Әлшәйем минең” йыр-3а** класс уҡыусылары башҡара

**2**.Хөрмәтле ҡунаҡтар! Һеҙҙе үҙе ижад иткән йыры менән лицей уҡытыусыһы Розалия Фаил ҡыҙы сәләмләй. Рәхим итеп ҡабул итегеҙ! **Йыр “Тыуған ерем - Әлшәйем”**

**1**.Бөтә шағирҙар ҙа тәүге шиғырҙарын йә тыуған ауылына, йә әсәһенә бағышлап, йә тыуған яғын, уның тәбиғәтен, шул уҡ аҡ ҡайындарын, мул һыулы йылғаларын, алтынланып ятҡан иген баҫыуҙарын данлап яҙғандар. Тирә -яҡ тотош шиғыр булғанда нисек шиғыр яҙмай түҙмәк кәрәк? Һәм күңелендә шиғриәткә һөйөү йөрөткән һәр кем оло шиғриәткә юлды тап ошонан-тыуған тупһанан башларға тейештер ҙә!

**2 төркөм шиғырҙар һөйләй (тыуған ер)**

**1**.Ҡайһы саҡта хистәр күңелемдән
Шишмә төҫлө сыға урғылып,
Һәм, ашҡынып, шунда, еңел телдән,
Аға башлай дәртле йыр булып.

Беҙҙең яҡташ шағирҙарҙың шиғырҙарына бик күп йырҙар ижад ителгән.
Уларҙы ҙур сәхнәләрҙә республикабыҙға билдәле йырсылар башҡарыуында ишетергә мөмкин.

**2.**Илфак Фарызов һүҙҙәренә Наил Шаймарҙанов яҙған йырҙы Айҙар Ғәлимов башҡарыуында тыңлап үтәйек. “**Ауылым ҡарттары” Видео клип**

**2.**Яҡташыбыҙ Әнүәр Нурғәлиев башҡарыуында**”Һин бит минең шатлығым.** Гөлфиә Гизатова һүҙҙәре,Рөстәм Гизатуллин көйө. **Видео клип**

**3 төркөм шиғырҙар һөйләй (урман,көҙ)**

**1**.Гөлнур Ғиззатуллина һүҙҙәре һәм көйөнә улы Рөстәм Ғиззатуллин башҡарыуында **“Айлы төндә” йыры.**

**1.**Эй һин, шиғыр! Сихри көсөң менән
Һин ҡол иттең мине ғүмергә.
Шуғамы икән һаман аллам итеп
Мин ҡарайым ысын шағирға.

2. Йәнһеҙҙәргә ул йән бирә ала,
Таштары ла уның һөйләшә.
Йондоҙҙарҙы, тауҙар менән тауҙы
Ҡауыштыра шағир теләһә.

**4 төркөм шиғырҙар һөйләй (кеше,әсә)**

**1.**Розалия Вәлиәхмәтова һүҙҙәре һәм көйөнә **“Әсәйемдең тыуған көнө” йыры**

**2.**Рөстәм Ғиззатуллин һүҙҙәре һәм көйөнә туғаны Нияз Ғиззатуллин башҡарыуында **“Әсәйҙәрҙе рәнйетмәгеҙ” йыры**

**5 төркөм шиғырҙар һөйләй (уҡытыусылар)**

**1.**Розалия Вәлиәхмәтова һүҙҙәре һәм көйөнә **“Уҡытыусым” йыры**

**6 төркөм шиғырҙар һөйләй (кескәйҙәр тур)**

**1**.“Дуҫлыҡ бүлешкәндән генә арта”, - тигән халҡыбыҙҙың бөйөк шағиры Мостай Кәрим. Илһам да бүлешкәндән ишәйә. Шиғри йәнле кешеләребеҙ күберәк булған һайын, донъябыҙ йәмлерәк, йәшәйешебеҙ ҙә ғәмлерәк була бара.

**2.**Беҙҙең мәктәптең данын Республика кимәлендәге олимпиадала, “Урал батыр” эпосын яттан һөйләүселәр бәйгеһендә, “Башҡортостан ынйылары” конкурсында күрһәткән уҡыусыбыҙ **Альмира Кашапова үҙенең шиғырҙарын уҡый. ( Видео)**

**Хөсәйенова Алия “Ижадташ дуҫтарға”Г.Гизатова**

**1.**Күңелендә шиғыр осҡоно йөрөтөүселәрҙән кемдер донъя гүзәллегенә һоҡланыуын, кемдер шатлығын йә хәсрәт-зарын, кемдер мөхәббәтен аҡ ҡағыҙ битенә төшөрә. Шулай күңелендә ташҡан хис-тойғоларҙы башҡалар менән дә уртаҡлашырға теләй улар. Әйҙәгеҙ ҙур кинәнес менән һүҙҙе үҙҙәренә бирәйек. Рәхим итегеҙ!

**2. 7а класс ҡыҙҙары башҡарыуында “Тыпырҙаҡ” бейеүе**

**2. Наил Садыков башҡарыуында “Башҡортостан ҡыҙҙары”йыры**
Гөлфиә Юнысова һүҙҙәре, Нурия Абдуллина көйө.

**1.**Бына күркәм сарабыҙ аҙағына ла яҡынлашты. Хөрмәтле ҡунаҡтар, һеҙгә барығыҙға ла шундай онотолмаҫлыҡ минуттар бүләк иткәнегеҙ өсөн ҙур рәхмәт.Бөгөнгө кисәбеҙҙең иҫтәлеге итеп беҙҙән бәләкәй генә бүләктәр ҡабул итегеҙ.

**Директор ҡунаҡтарға бүләктәр тапшыра**

**Директор уҡыусыларға грамоталар тапшыра**